1.**Төрлө төбәктәрҙә йәшәгән халыҡтар тарафынан ҡулланылған телмәр нисек атала?**

**Яуап: диалект, һөйләш тип атала.**

2.**Телдең функцияларын һанап китегеҙ?**

**Яуап:кеше менән аралашыу сараһы;**

*3.Бирҙең, тәңрем, телде беҙгә, һөйлә тип,*

*Тура юлға телде шуға әйҙәйем!* **Был һүҙҙерҙең авторы кем?**

**Яуап: шағир- мәғрифәтсе М.Аҡмулла**

**4. Бер-бер артлы теҙелгән ялғауҙар ярҙамында һүҙ һәм грамматик форма яһалыу ысулы нисек атала?**

**Яуап: А. агглютинация**

Б. флексия

В. инкорпорация

Г. фузия

5. ***Өфөләрҙән Мәскәүҙәргә*** *саҡлы…* Күплек ялғауы ниндәй мәғәнә белдерә?

А.күплек мәғәнәһе

Б. модаллек мәғәнәһе

**Яуап: В.экспрессивлыҡ мәғәнәһе**

Г.коллектив күплек мәғәнәһе

6. ***Әгәр, әгәр ҙә, әгәр ҙә мәгә***р теркәүестәре ниндәй мәғәнәне көсәйтә?

А.сәбәп мәғәнәһен

Б.оҡшатыу мәғәнәһен

**Яуап: В.шарт мәғәнәһен**

Г. ҡаршы ҡуйыу мәғәнәһен

7. Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ:

***Яуап: Рамазан-пулеметсы биштәрле ауыр тоҡсайҙы, Федотов Нефедычтың трофей мылтығын аҫып, урман шауына ҡолаҡ һала-һала, күп тә барманылар, шартлап ботаҡ һынғаны ишетелде, юлдарын бүлеп ниндәйҙер ҡараҫҡы үтеп (Ә.Хәкимов).***

*8. Эштән ҡайтҡас, мин клубҡа барҙым.* Был һөйләмдә ни өсөн өтөр ҡуйыла, аңлатығыҙ?

**Яуап: Баш һөйләм менән ваҡыт эйәрсән һөйләм араһында өтөр ҡуйылған.**

9. *Казармала, командирҙар өсөн тәғәйенләнгән бүлмәләрҙең береһендә, ике полк комиссары, Ғимаҙиев менән Хоҙайбирҙин, бергә торҙо.* Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ һәм ни өсөн теге йәки был тыныш билдәһенең ҡуйылыу осрағын аңлатығыҙ. **Яуап: инеш һүҙҙәр, өҫтәлмәлектәр һөйләмдә өтөр менән айырылалар**

10. *смола – һумала, книга – кенәгә* һуҙынҡы өн һүҙ башындағы ике тартынҡы өндөң араһына ҡуйылып әйтелә, был күренеш нисек атала?

**Яуап:Протеза күренеше. Башҡорт телендә һүҙ башында тартынҡыларҙың ойошоп килеү хәле юҡ, хатта бер рәттән ике тартынҡы ла килмәй.Шуға күрә үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә, бер рәттән килгән тартынҡылар алдынан –ы, е, о,ө һуҙынҡылары өҫтәлгән.**

11. М. Ғафури әҫәрҙәрен билдәләгеҙ

А.”Боролош”, “Ҡара йөҙҙәр”, “Өсәүҙең тарихы”

Б.”Сибай”, “Еңелгән ятыу”

**Яуап: В.”Ҡара йөҙҙәр”, “Шағирҙың алтын приискыһында”**

12. М. Ғафуриҙың “Ҡара йөҙҙәр” повесының төп геройҙарын билдәләгеҙ

**Яуап: А.Закир, Ғәлимә**

Б.Ғариф, Сәхибә

В.Сәйҙел, Зәйнәп

13. Ғ. Сәләм әҫәрен билдәләгеҙ

А.”Эшсе” поэмаһы

Б.”Ҡан” роман

**Яуап: В. ”Бала” поэмаһы**

14. Йәнәш торған тартынҡы өндәрҙең бер-береһенә оҡшамауы нимә тип атала?

**Яуап: Йәнәш торған тартынҡы өндәрҙең бер-береһенә оҡшамауы, *диссимиляция* тип атала:берлек, көнлөк, йәйлек, йыллыҡ, ғүмерлек, тоҙло,атһыҙ.**

15. *лап-лап, йәлт, ем-ем, салт, мөлдөр-мөлдөр* һүҙҙәре ниндәй төркөмгә ҡарай?

**Яуап: Ымлыҡтар**

16. Беҙ белмәйбеҙ, бәлки, ул бала

Ҙур геолог булып танылыр.

Уның аҡылы ***аша*** алтындан

Ҡиммәтлерәк металл табылыр (М. Сөйөндөклө). ***Аша*** бәйләүесе ниндәй төргә ҡарай?

**Яуап: Сығанаҡ килеште талап итеүсе бәйләүес.**

17. *Йәшәй-йәшәй шуны* ***белдем:***

*Барынан өҫтөн – хаҡлыҡ!*

*Уның өсөн яндым-көйҙөм,*

*Хаҡлыҡты һөйҙөм артыҡ. (Ҡ. Әлибаев).* Билдәләнгән һүҙгә морфологик анализ эшләгеҙ.

**Яуап: белдем-ҡылым, башланғыс формаһы- бел,тамыр, хәбәр һөйкәлеше, үткән заманда, 1-се зат берлектә, һөйләмдә хәбәр булып килгән.**

18. ***Балалар, китаптар*** исемдәрендә күплек мәғәнәһе ниндәй юл менән бирелә

А.аффиксаль юл

Б.синтаксик юл

В.стилистик юл

**Яуап:Г.фонетик юл**

19. *Сыңғыр-сыңғыр сыңраған*

***Йылҡыһы күп*** *Уралтау…*

Күплек мәғәнәһе ниндәй юл менән бирелә

**Яуап: А.синтаксик юл**

Б.синтетик юл

В.стилистик юл

Г.фонетик юл

20. ***Бесән сабыу*** тигән һүҙбәйләнештә исемдең килешен билдәләгеҙ

А.эйәлек килеш

**Яуап: Б.төшөм килеш**

В.төбәү килеш

Г.сығанаҡ килеш.